# БАШҠОРТ АУЫЛЫ: УНЫҢ БӨГӨНГӨҺӨ ҺӘМ КИЛӘСӘГЕ



Бөтә донъя башҡорттары ҡоролтайы Башҡарма комитетының уҙған 2004 йылдағы һуңғы киңәйтелгән ултырыштарының береһе ошо темаға арналды.

Ултырыш ҡарары менән, Башҡарма комитет эргәһендә Башҡорт ерҙәрен һаҡлау комитеты ойошторолдо, рәйесе вазифаһына "Алға" сауҙа-етештереү фирмаһының генераль директоры Нил Шәйҙулла улы Бәхтийәров һайланды. 15 ағза ингән комитет составында күренекле ғалимдар Нурамбик Арыҫланов, Мазһар Иҫәнбаев, Нәзир Ҡолбахтин, эшҡыуарҙар, республика парламенты депутаттары, Һамар, Ырымбур, Пермь, Ҡурған, Силәбе өлкәләре вәкилдәре, журналистар бар.

Шулай уҡ ултырыш ҡарары менән Бөтә донъя башҡорттары ҡоролтайы Башҡарма комитеты Советы составы раҫланды һәм унда Әхмәт Сөләймәнов (Совет рәйесе), Марат Аҙнабаев, Румил Аҙнабаев, Ҡәҙим Аралбаев, Иршат Аҫылғужин, Фәрит Әхмәҙиев, Фирҙәүес Бәширова, Рим Вәлиәхмәтов, Әлтәф Ғәйфуллин, Зөфәр Еникеев, Илдус Илешев, Марат Камалов, Морат Кейекбаев, Нәзир Ҡолбахтин, Гөлнур Ҡолһарина, Марат Ҡолшәрипов, Нияз Мәжитов, Батырхан Мырҙабаев, Роберт Солтанов, Фәнил Фәйзуллин, Илшат Хәсәнов, Фирҙәүес Хисаметдинова, Рәшит Шәкүр, Әмир Шамаев, Марс Юлдашев, Риф Иҫәнов һәм Гүзәл Ситдиҡова инде. Совет ултырыштары айына бер тапҡыр уҙғарыла һәм унда Башҡарма комитеттың алдағы ултырыштарында тикшереләсәк мәсьәләләр билдәләнә.

Яңы ойошторолған Башҡорт ерҙәрен һаҡлау комитетының эшмәкәрлеге тейешле положение нигеҙендә алып барыла. Комитеттың төп эш маҡсаттары түбәндәгеләрҙән ғибәрәт:

— ер мөнәсәбәттәре тураһында объектив информация туплау һәм таратыу;

— ер мәсьәләләре буйынса социологик тикшереүҙәр, фәнни-теоретик һәм ғәмәли конференциялар, семинарҙар ойоштороу;

— кеше һәм милләт хоҡуҡтарын, шул иҫәптән ергә хоҡуҡты яҡлауҙа халыҡ-ара һәм Рәсәй хоҡуҡи ойошмалары менән хеҙмәттәшлек;

— башҡорт халҡының ергә хоҡуҡтарын яҡлау һәм ғәмәлгә ашырыу;

— башҡорт халҡының ергә хоҡуҡтарына ҡағылышлы ҡарарҙар ҡабул ителгәндә халыҡ-ара, федераль ойошмалар, РФ субъекттары органдары менән хеҙмәттәшлек;

— халыҡ-ара, федераль ойошмалар, РФ субъекттары органдары менән берлектә башҡорт халҡының ергә хоҡуҡтарын яҡлауға йүнәлтелгән махсус программалар, саралар әҙерләү һәм ғәмәлгә ашырыу;

— башҡорт милләте вәкилдәренә ергә хоҡуҡтарын яҡлауҙа һәм ғәмәлгә ашырыуҙа информация, хоҡуҡ, фәнни методика йүнәлештәрендә ярҙам күрһәтеү.

Уҡыусыларыбыҙ иғтибарына ултырыштағы айырым сығыштарҙы тәҡдим итәбеҙ.

**САТАЕВ Шамил Сәлмән улы, БР Крәҫтиән-фермер хужалыҡтары һәм ауыл хужалығы кооперативтары ассоциацияһы президенты:**

— Башҡортостан Республикаһында әлеге көндә 4,3 миллион гектар һөрөнтө ер иҫәпләнә, һәм беҙ Рәсәй Федерацияһындағы иң күп ауыл хужалығы продукцияһы етештереүсе өс регион иҫәбендәбеҙ. Республикала коллектив хужалыҡтарҙы мотлаҡ таратыуға йүнәлеш алынманы, хужалыҡ итеүҙең төрлө формалары үҫешеп килә. Һәр районда крәҫтиән-фермер хужалыҡтарын үҫтереү программаһы ҡабул ителде. Әлеге көндә ваҡ хужалыҡтарҙың берләшеү процесы күҙәтелә. Уртаса хужалыҡ ҡулындағы майҙан 125 гектар тәшкил итә.

Ассоциация яңы шарттарҙа ауыл хужалығын кадрҙар менән тәьмин итеүҙе лә күҙәтеүҙә тота. Мәҫәлән, Стәрлетамаҡ совхоз-техникумында фермерҙар уҡытыла, күп колледждарҙа бухгалтерҙар, менеджерҙар әҙерләнә.

Крәҫтиән-фермер хужалыҡтары үҫешен хаҡтар һәм кредит сәйәсәте айырыуса ныҡ тотҡарлай. Хаҡтар диспаритеты арта: электр энергияһына, яғыулыҡҡа, техникаға хаҡтар сикләүһеҙ үҫһә, ауыл хужалығы продукцияһына хаҡтар ул хәтлем йылдам үҙгәрә алмай. Хужалыҡтар бөгөндән 1 миллиард һум самаһы кредитҡа мохтаж, әммә быйыл уларға 95 миллион һум ғына бирелде. Банктар әлегә фермерҙар менән хеҙмәттәшлектән ситләшә.

**ХОХЛОВ Иван Сергеевич, БР Ер ресурстары һәм ер эштәре буйынса дәүләт комитеты рәйесе урынбаҫары:**

— Әлбиттә, был йүнәлештә эште граждандарҙың ергә хоҡуҡтарын юридик теркәүҙән башлау мөһим. Ауыл хужалығы ҡулланыуындағы ерҙәр формаль рәүештә генә бүленеп, халыҡҡа пайҙар таратылған тип иҫәпләнә. Әммә күпселек осраҡтарҙа юридик теркәү үтелмәй. 2006 йылдың башынан, Рәсәй Федерацияһы закондарына ярашлы, был хәлде тейешле тәртипкә килтереү талап ителә. Беҙҙең комитет тарафынан кәрәкле норматив база эшләнгән: республикала ер кадастры менән бәйле эштәр, инвентаризация, ерҙәрҙең хаҡын билдәләү Рәсәй Федерацияһында иң тәүгеләрҙән булып башҡарылды. Норматив документтар менән барлыҡ ҡыҙыҡһыныусыларҙы тәьмин итергә әҙербеҙ. Алда беҙҙе бик көсөргәнешле эш көтә.

**ӘХМӘТЙӘНОВ Динир Әсхәт улы, БР Дәүләт Йыйылышы — Ҡоролтай депутаты, Аграр мәсьәләләр, тәбиғәт ресурстары, тәбиғәттән файҙаланыу һәм экология буйынса комитет ағзаһы:**

— Дәүләт Йыйылышы — Ҡоролтай ер мәсьәләләренә ҡағылышлы закондар менән ныҡлы шөғөлләнә. Быға тиклем беҙ ауыл хужалығы ҡулланыуындағы ерҙәрҙе һатыуҙы тыйған республика референдумына, Ер кодексына таянып эш иттек. Хәҙер улар ғәмәлдән сығарылды, бөтәһе лә Рәсәй закондарына тап килтерелергә тейеш, әммә ул закондар федерация субъекттарының хоҡуҡтарын ныҡ

сикләй. Беҙгә иһә урындағы реаль шарттар менән иҫәпләшеп эшләргә кәрәк.

Икенсе яҡтан, тағы ла шуныһын уйларға кәрәк. Беҙ, әүәлге традицияларға һылтанып, ерҙәрҙе йәмәғәт ҡулланыуында ҡалдырыу тәртибен яҡлайбыҙ. Ерҙәрҙең хоҡуҡи статусын юридик нығытыу зарурлығын инҡар итәбеҙ. Шуның менән беҙ үҙ халҡыбыҙҙы яҡын киләсәктә бөтөнләй ерһеҙ ҡалдырыуға этәрәбеҙ түгелме? Бөгөнгө хоҡуҡи йәмғиәттә ерҙәрҙең реаль, юридик хужалары булырға тейешлеген аңлатыу мөһим. Төп проблема ерҙе һатыуҙа түгел, ә уға реаль хоҡуҡты юридик йәһәттән нығытыуҙа.

**АРЫҪЛАНОВ Нурамбик Ғиниәт улы, профессор, иҡтисад фәндәре докторы:**

— Мәсьәләнең иҡтисади яғына иғтибар итәйек. Рәсәй закондарын аграрийҙар, иҡтисадсылар менән бигүк иҫәпләшеп тормай төҙөп ташланылар, шуға улар күп осраҡта яраҡһыҙ. Мәҫәлән, эре етештереүселәрҙең мәнфәғәттәре ваҡ фермерҙыҡына ҡаршы ҡуйыла. Беҙҙә тиҫтәләрсә йылдар эшләп, бай тәжрибә туплаған ҙур хужалыҡтар күп. Әммә сәйәси системалағы етешһеҙлектәрҙе эре хужалыҡтарға бәйләү дөрөҫ булмаҫ ине. Шул уҡ АҠШ-та барлыҡ аграр секторҙың ни бары 3 процентын тәшкил иткән эре предприятиелар продукцияның 70 процентын етештерә. Нәҡ ошо предприятиелар иң алдынғы техника, технологиялар ҡуллана, иң арзан продукция етештерә. Ә ваҡ фермер хужалыҡтарының байтағы дәүләт дотацияһында ултыра.

Беҙҙә лә ошо проценттар, ниһайәт, цивилизациялы төҫ ала башларға тейеш. Бының өсөн тәүҙә ныҡлы дәүләт көйләүе кәрәк. Эште үҙебеҙҙең етештереүсене яҡлауға йүнәлтелгән саралараҙан башларға мөмкин. Әлегә иһә беҙҙә ауыл хужалығы продукцияһы етештереүҙән алынған килемдең иң ҙур өлөшө етештереүсенең үҙенә түгел, ә күп һанлы аралашсы, сауҙа предприятиелары ҡулына эләгә. Уларына иһә нимә менән сауҙа итһәләр ҙә барыбер, килем генә булһын. ”Буш тауыҡ боттары” менән килеп тыуған хәлде алайыҡ. Демпинг хаҡтары менән һатылған ул продукция беҙҙәге элекке ”Птицепром” предприятиеларын банкрот хәленә еткерҙе. Был осраҡта тыйыу аша эш итеү ҙә килешмәй, сөнки ул осраҡта ҡала халҡының ит рационына ҙур зыян килер ине. Тимәк, алмашҡа үҙебеҙҙә күберәк һәм сифатлыраҡ продукция етештереү зарур. Был эште дәүләт көйләүе аша ғына уңышлы алып барырға мөмкин.

Ер мәсьәләләренә килгәндә, уны һатыу йәки һатмау тураһындағы оҙаҡҡа һуҙылған шау-шыуҙан аныҡ эшкә күсергә — ергә хоҡуҡты юридик теркәүҙе башларға кәрәк. Бына ниндәй төп талап ҡуйылырға тейеш бөгөн.

Фән дә был эшкә ҡушылырға тейеш. Иң тәүҙә иҡтисадсылар һәм социологтар. РФ ауыл хужалығы министры Гордеев биргән мәғлүмәттәргә ярашлы, һуңғы 15 йыл эсендә илдә 20 меңдән ашыу ауыл юҡҡа сыҡҡан. Был хәл иң тәүҙә колхоздарҙы бөтөрөү, ауылдағы барлыҡ инфраструктураны тарҡатыу менән бәйле. Беҙҙә лә рустар ҡалаға күсеп бөтөп бара, ә башҡорттар ауыл ерендә күп йәшәй әле. Иҡтисадсылар, социологтар ауыл тормошо, шулай уҡ ҡалалағы башҡорттарҙың хәле, урбанизация процестары менән бәйле проблемаларҙы ентекләп өйрәнә башларға тейеш. Бында теүәл, аныҡ рекомендациялар кәрәк. Иң ауыр хәлдә башҡорт ауылдары ҡалғанын онотorға ярамай.

**ИҪӘНОВ Риф Шәрифрахман улы, ”Урал” Башҡорт халыҡ үҙәге идараһы рәйесе:**

— Ауылдағы хәлдәрҙе теүәлерәк, аныҡыраҡ баһалауҙан башлайыҡ. Ниңә йәштәр ауылдан китә? Эш, социаль инфраструктура, перспектива юҡлыҡтан. Ауыр иҡтисади һәм социаль хәлдең эҙемтәләре булған эскелектән, әхлаҡһыҙлыҡтан, фәҡирлектән ҡаса йәштәр.

Ергә халыҡ хужа, тип, дөйөм декларатив һүҙҙәр менән сикләнәбеҙ. Әммә төбәктәрҙә әлегә ысын хужалар — урындағы хакимиәт етәкселәре барлығын онотабыҙ. Тимәк, уларҙан һорарға, талап итергә тейешбеҙ. Улар — барыһы ла депутаттар, етмәһә. Ниңә халыҡ төбәктәрҙән ҡаса — яуап бирһендәр. Техника, ҡорамалдар ҡайҙа — яуап бирһендәр. Ә яуаплылыҡ булһын өсөн, хакимиәттәргә эшләргә мөмкинлек бирергә кәрәк. Уларҙы йыш алмаштырыуҙан файҙа булмауын күреп торабыҙ. Әйҙә, ергә хужа эҙләмәйек — бөгөнгө реаль хужалар менән эшләйек, уларҙан талап итәйек.

**ДИНМӨХӘМӘТОВ Мөхәррәм Йомағужа улы, Ҡурған өлкәһе Сафакүл районы башҡорттары ҡоролтайы Башҡарма комитеты рәйесе, Сафакүл район хакимиәтенең ер эштәре буйынса комитеты рәйесе:**

— Башҡорт ауылдарын һаҡлап алып ҡалыу проблемалары беҙҙә бик ауыр тора. Элекке 13 хужалыҡтан 5-әү генә тороп ҡалды. Һөрөнтө ерҙәрҙең 30 проценты ғына ҡулланыла. Ҡалған баҫыуҙарҙы ағас баҫа, унда хәҙер һабан менән инерлек тә түгел. Ауылдарҙа газ юҡ, 2 ауылға ғына асфальт юл үтә. Яңыраҡ 7 мәктәптә аҡсаһын ваҡытында түләмәгән өсөн электр энергияһы бирмәй торҙолар. Һуңғы ун биш йыл эсендә райондағы башҡорт халҡы 1,5 мең кешегә кәмегән. Йәштәр ауылдарҙы күпләп ташлап китә. Эшкәртелмәй ятҡан баҫыуҙарҙы Төмән, Екатеринбург ойошмаларына арендаға бирә башланылар. Килеп, 50—100 кеше менән килешеү төҙөп, пайҙарын алалар.

Башҡортостанда, беҙҙәгенән айырмалы, эре хужалыҡтарҙы һаҡлап алып ҡалдылар. Уларҙы тарҡатыуға юл ҡуйырға ярамай.

**АҠДӘҮЛӘТОВ Салауат Ғайса улы, "Каруанһарай" гәзите мөхәррире (Ырымбур):**

— Беҙҙә лә хәлдәр Ҡурған өлкәһендәге һымағыраҡ. Ун йыл элек пайҙар бүлделәр һәм колхоздарҙы бөтөрҙөләр. Техника ҡалманы. Яҙын игенде көс-хәл менән сәсәләр әле, ә көҙөн уңышты йыйып алырға комбайн юҡ. Ҡайһы бер хужалыҡтар, ярҙам һорап, Башҡортостандағы МТС-тарға мөрәжәғәт итә. Өлкәлә ни бары ике ҙур хужалыҡ табыш алып эшләй, ҡалғандары иһә банкрот хәлендә.

Ер мәсьәләләренә килгәндә, хәл ҡатмарлы. Етәкселәр иң тәүҙә рустарҙың мәнфәғәтен яҡлай. Ә улары Ырымбур казак ғәскәре ойошторҙо һәм үҙ законадары буйынса йәшәй, берәүгә лә буйһонмай. Ауылдарҙы станица итеп үҙгәрттеләр, унда бөтәһе лә "казачий круг" ҡулында. Иң тәүҙә — ер. Ә башҡа халыҡтарҙың хоҡуҡтары менән иҫәпләшеү юҡ — бөтәһенә лә казак хужа. Казактарҙың теләге — закон. Киләсәктә улар менән бик ҙур проблемалар килеп тыуыуы ихтимал.

Беҙҙең башҡорттар ҙа казак ҡатламы статусына дәғүә итә башлағас, быға юл ҡуйылманы. Именлек органдары бимазаларға кереште — йәнәһе, беҙ башҡорттарҙы ҡоралланырға саҡырабыҙ. Билдәле булыуынса, казактарға хәрби кейем кейеү һәм ҡорал йөрөтөү хоҡуғы бирелгән.

Тимәк, бер генә юл ҡала — ер мәсьәләһе ғәҙел, законлы нигеҙҙә хәл ителергә тейеш. Башҡа юл юҡ.

*Закир Зиннәтуллин әҙерләне.*